# Сәбәп һөйләм.

# Һайланма диктант.

- Мин интернатта уҡыйым. Йоҡоға китер алдынан йыш ҡына шуны уйлайым: ошо минутта әсәйем ни эш бөтөрә икән. Эйе, беҙ уның буш торған сағын күргәнебеҙ юҡ шул. Ял иткәндә лә, ниндәйҙер эш башҡара. Ул эштән ҡайтып инә лә, кейемен алыштырып, бөтмәҫ-төкәнмәҫ өй эштәренә тотона: ашарға әҙерләй, шул арала таҫтамалдарҙы йыуып ала. Ҡустымдың өйгә эштәрен тикшерә, еп иләй, телевизор ҡарағанда шәл бәйләй.

- Һәр саҡ шат, көләс, яғымлы. Ул ҡайтып инеү менән, өй эсе йәмләнә. Шуға беҙ ҡустым менән йыр сығарҙыҡ:
- Ҡыҙарып ҡояш сыҡҡан кеүек,
- Әсәйем ҡайтып килә.
- Мин әсәйемде ныҡ һағынғанлыҡтан, бер аҙна бик оҙаҡ ваҡыт кеүек тойола. Шулай ҙа уҡыуыма зарар килтермәйем, сөнки, өсләләрҙе күрһә, әсәйемдең алсаҡ йөҙөн болот ҡаплай.

# Сағыштырыу.

- 1. Иртәнсәк таң һарыһынан китеп, кис күҙ бәйләнгәс кенә ҡайталар.
- 2. Ныяҙғол да улай иреп киткәс, таштар сәскә атыр инде.
- 

(һ.Дәүләтшина)